## БАШКИРСКИЙ ЯЗЫК И ЛИТЕРАТУРА

## ИНСТРУКЦИЯ ПО ВЫПОЛНЕНИЮ ОЛИМПИАДНЫХ ЗАДАНИЙ ПО ФИЛОЛОГИИ (РОДНЫЕ ЯЗЫКИ - БАШКИРСКИЙ ЯЗЫК И ЛИТЕРАТУРА) 8-9 КЛАССЫ

Олимпиадная работа состоит из 30 заданий по башкирскому языку и литературе.

Следует внимательно читать указания, относящиеся к правилам выполнения каждого задания.

На выполнение олимпиадной работы отводится 4 часа.

Каждое задание оценивается соответствующим баллом. Баллы, полученные Вами за выполненные задания, суммируются.

Постарайтесь выполнить как можно больше заданий и набрать наибольшее количество баллов.

После завершения работы проверьте, чтобы ответ на каждое задание в бланках ответов был пронумерован в соответствии с номером задания.

Все бланки заполняются яркими чёрными чернилами. Допускается использование гелевой или капиллярной ручки.

При выполнении заданий можно пользоваться черновиком. Записи в черновике, а также в тексте олимпиадных материалов не учитываются при оценивании работы.

Пишите аккуратно, разборчивым почерком.

Желаем успеха!

## ЧАСТЬ 1. БАШКИРСКИЙ ЯЗЫК

**Задание 1.** Телмәр өндәрен *ике ирен өндәре, тел-теш өндәре, тел алды өндәре, аңҡау уртаһы өндәре, тамаҡ төбө өндәре* тигән төрҙәргә бүлеү ниндәй бүленешкә ҡарай?

**Задание 2.** [в], [ф] өндәре яһалыу урыны буйынса ниндәй өндәр?

**Задание 3.** Әйтелешен еңелләштереү өсөн ҡайһы бер сит телдән үҙләштерелгән һүҙҙәрҙең эсенә өҫтәлмә һуҙынҡы өн ҡушыу нисек атала?

**Задание 4.** Түбәндәге һүҙҙең тамырын, нигеҙен, яһаусы һәм үҙгәртеүсе ялғауҙарын күрһәтегеҙ: *баҡсасыларҙың*

**Задание 5.** *Айырылған* *ҡаҙ* *тупланған* *ҡарғаға ем* *булған* һөйләмендә аҫтына һыҙылған ҡылымдарҙың ҡайһыһы – сифат ҡылым, ҡайһыһы – хәбәр һөйкәлеше ҡылымы?

**Задание 6.** Һүҙ яһаусы һәм эйәлек ялғауҙары ҡабул иткән һүҙҙең аҫтына һыҙығыҙ: *Балаларым, тотҡонға, төҙөлөштән, күҙлегем, тимерсеһегеҙ.*

**Задание 7.** *Ҡулың һүҙ ҙа тот та ал үҙен.* Был һөйләмдә аҫтына һыҙылған һүҙ ниндәй килештә килгән?

**Задание 8.** *Ашаған белмәй, тураған белә* (Мәҡәл). Был һөйләмдә ниндәй һүҙ төркөмө исемләшеп килгән?

**Задание 9.** *Ҡойма-ҡапҡалар,тәҙрәләр, хатта ишек – <u>гөллө-сәскәле</u>* (“Башҡортостан”). Аҫтына һыҙылған һүҙ ниндәй һөйләм киҫәге булып килгән?

**Задание 10.** Бер составлы һөйләмдең төрөн билдәләгеҙ: *Аяҙытып ебәрҙе. Ерҙең өҫтөн туңдырҙы* (Н.Мусин).

**Задание 11.** Эйәрсән һөйләмде табып, уның төрөн билдәләгеҙ: *Азамат яҡшы белә: беҙҙең яҡта ҡунаҡ һыйлау – байрам ғына бит ул.*

**Задание 12.** *План үтәлгәнме, халыҡ нисек йәшәй, ни һөйләй – шуларҙың барыһын да белергә кәрәк Камалетдиновка.* (“Шоңҡар”). Һөйләмдең төрөн билдәләгеҙ:

**Задание 13.** Башҡорт телендә орфография принциптарының береһе булған морфологик принцип нигеҙендә һүҙҙәр нисек яҙылырға тейеш?

**Задание 14.** Ҡағиҙә буйынса дөрөҫ яҙылған һүҙҙең аҫтына һыҙығыҙ: *Донбаста, Омскиҙән, Брестҡә, Кирилларды, Шмидтте.*

**Задание 15.** *Тирә-яғымдың йәшеллеккә күмелеүенән үҙемде иҫ киткес бәхетле, килгән яҙ кеүек мәңгелек итеп тоям* (Т.Ғиниәтуллин). Һөйләмдәге алмашта ниндәй ялғауҙар бар?

**Задание 16.** Исемдәрҙең хәбәрлек заты ялғауын ҡабул иткән һүҙҙең аҫтына һыҙығыҙ: *Ҡыҙы, беләҙегең, егетмен, йөҙөгөм, уҡыусыларһығыҙ.*

**Задание 17.** *Айырылмаҫ дуҫыңа онотолмаҫ һүҙ әйтмә* (Әйтем). Һөйләмдә ниндәй ҡылым төркөмсәһенә ҡараған һүҙҙәр бар?

**Задание 18.** Бирелгән һөйләм нисә һөйләмдән тора: *Беҙ тартышмаһаҡ, беҙ берләшмәһәк, кем бирер хоҡуҡ, беҙ көрәшмәһәк?* (С.Ҡудаш).

**Задание 19.** *Сәсәндең теле уртаҡ, егәрленең ҡулы уртаҡ*. Һөйләмдең төрөн билдәләгеҙ.

**Задание 20.** *Ҡулың пак булһа, йөҙөң аҡ булыр; эшең хаҡ булһа, ғаиләң шат булыр.* Һөйләмдең төрөн билдәләгеҙ.

## ЧАСТЬ 2. БАШКИРСКАЯ ЛИТЕРАТУРА

**Задание 1.** Нимә ул *“ауыҙ-тел әҙәбиәте”* һәм *“яҙма әҙәбиәт”*? Улар бер-береһенән ниндәй үҙенсәлектәре менән айырыла? Уртаҡ яҡтары нимәлә?

**Задание 2.** Халыҡ хикәйәләрен ғәҙәттә *риүәйәт* йәки *легенд*а тип йөрөтәләр. Уларға ҡылыҡһырлама яҙығыҙ, оҡшаш һәм айырмалы яҡтарын билдәләгеҙ. Улар, йөкмәткеләренә ҡарап, ниндәй төрҙәргә бүленә?

**Задание 3.** Түбәндә М.Өмөтбаевтың билдәле мәҫәленән өҙөк тәҡдим ителә. Текстан сығып, Ҡайыш менән Йүкә образдарына ҡылыҡһырлама бирегеҙ: улар нимәне символлаштыра? Ниндәй образдарҙы “*аллегорик образ*” тип йөрөтәләр?

*Ҡайыш тәрбиәлелер һәм әҙ эшләй,*
*Уның өҫтөн биҙәйҙәр алтын-көмөшкә.*
*Ҡайыш майлы өсөн хөрмәт табылыр,*
*Йүкәәлә ул юҡ өсөн кәм баһалыр.*

*Мәгәр һыу Йүкәнең төҫөн асалыр,*
*Һыу менән күп ергә дәүләт сәсәлер.*
*Нисек Ҡайыш тота ҡорола майҙан,*
*Йүкә һыуҙа көс алмыш һәм Хоҙайҙан.*

**Задание 4.** Рәшит Ниғмәтиҙең “Үлтер, улым, фашисты!” поэмаһы В.Маяковский әҫәренән алынған шундай *эпиграф* менән асыла:

*Быңдай ер менән*
*барырһың йәшәүгә.*
*хеҙмәткә,*

*байрамға,*
*үлемгә!*

Р.Ниғмәти был юлдарҙы ниндәй маҡсаттан сығып үҙенең әҫәренә индергән? Был эпиграфтың поэмала тотҡан урынын нисек аңлатырһығыҙ? Мөмкин тиклем тулыраҡ яуап яҙырға тырышығыҙ.

**Задание 5.** Шәриф Биҡҡолдоң шиғырынан түбәндәге строфа халыҡ ижадының ниндәй жанрын хәтерләтә? Ни өсөн? Яуабығыҙҙы нигеҙләп яҙырға тырышығыҙ.

*Сылтырап аҡҡан шишмәнең*
*Һыуҙары һалҡын икән.*
*Ниңә минең күңелемдә*
*Гел ут та ялҡын икән?*

**Задание 6.** Түбәндә халыҡ ижады һәм әҙәбиәттән өлгөләр бирелгән, жанрҙары буталған. Шуларҙың һәр береһен дөрөҫләп, үҙ урындарына яҙып сығығыҙ.
“Һуңғы һартай” – повесть
“Ғилмияза – ода
“Ерәнсә сәсән” - ҡобайыр
“Бошман-Ҡыпсаҡ батыр” - роман
“Алтын алма” – трагедия
М.Ғафуриҙың “Гөлдәр баҡсаһында” әҫәре - йыр
М.Кәримдең “Ташлама утты, Прометей!” әҫәре – поэма
Ж.Кейекбаевтың “Туғандар һәм таныштар”ы – тарихи хикәйә
Ә.Бикчәнтәевтың “Бөркөт һауала үлә” – хикәйәт
Р.Ғариповтың “Уйҙарым” әҫәре - әкиәт

**Задание 7.** Нимә ул роман һәм уның жанр формалары? Роман жанры формаларына 5 миҫал яҙығыҙ, һәр береһенә мөмкин тиклем тулы ҡылыҡһырлама бирегеҙ, уларҙың төп сифаттарын билдәләгеҙ.

**Задание 8.** Әҙәбиәттә художество методы булараҡ реализм. *Реализм* менән *тәнҡитле реализм* методтарына билдәләмә бирегеҙ, конкрет миҫалдар нигеҙендә аңлатма яҙырға тырышығыҙ.

**Задание 9.** Башҡорт йәки Башҡортостан яҙыусыларының исемдәрен йөрөткән ниндәй әҙәби премиялар булдырылған? Ун исемде яҙығыҙ.

**Задание 10.** Әҫәрҙең түбәндә бирелгән өлөшөнөң йөкмәткеһенән сығып, уның ниндәй сюжет элементына тура килеүен асыҡлағыҙ *(экспозиция, төйөнләнеү, ваҡиғалар үҫеше, кульминация, сиселеш)*. Ни өсөн? Сюжет һәм уның элементтары хаҡындағы белемегеҙҙе иҫкә төшөрөп, фекерегеҙҙе дәлилләп яҙығыҙ.

М.Ғафуриҙың “Ҡара йөҙҙәр” повесынан: *“Был эш бынан утыҙ йылдар элек ине. Беҙ, йәш шәкерттәр, йәстү намаҙынан алдараҡ сығып, мәҙрәсәгә ҡайттыҡ”.* Йәки, С.Агиштың “Мәхмүтов” повесынан: *“Бер мең туғыҙ йөҙ егерме дүртенсе йыл. Июль айының баштары. Мин был ҡалала беренсе тапҡыр булам.”.*